## Ата-әсәгә тәкдим ителгән исемдәр өлгөһө

### Ир-ат исемдәре

**АЗАМАТ** *ғәр.* – батыр, ҡыйыу, бөйөк, ғорур егет.

**АЗАТ** *фарс.* – ирекле, азат.

**АЙБУЛАТ** *баш., фарс.* – ай+булат (ҡорос); ай кеүек матур, ҡорос һымаҡ нығ.

**АЙГИЗ** *баш., фарс.* – ай+гиҙ, айға сәйәхәт ит; XX быуаттың 60-сы йылдарында йыһанды яулау уңышы аҫтында барлыҡҡа килгән яңы исем.

**АЙГИЗӘР** *баш. фарс.* – ай+гиҙәр; айға сәйәхәт итер; ҡара: Айгиз.

**АЙҘАР** *баш.* – 1) айлы төндә тыуған; 2) түбәһендә сәсе ҡалдырылған; тамғалы; билдәле, үҙенә бер төрлө; көслө, дәрәжәле, билдәле; 3) А. Ғафуров фекеренсә, Айҙар исеме ғәрәп теленән ингән Хәйҙәр исеменең фонетик варианты булып тора.

**АЙНАЗ** *баш., фарс.* – ай+наҙ.

**АЙНАЗАР** *баш., ғәр.* – ай+назар; ай кеүек яҡты ҡарашлы; нур сәсеп торған.

**АЙНУР** *баш., ғәр.* – ай нуры һымаҡ яҡты, матур.

**АЙСАР** *баш., ғәр.*– ай һымаҡ яҡты, бәхетле.

**АЙСАФ** *баш., ғәр.* – ай+саф; ай кеүек саф.

**АЙСОЛТАН** *баш., ғәр.* – ай+солтан; ай хужаһы.

**АЙСЫУАҠ** *баш.* – ай+сыуаҡ; ай кеүек яҡты һәм аяҙ.

**АЙТУҒАН** *баш.* – ай+тыуған; ай һымаҡ матур, күркәм бала тыуған.

**АЛАН** *баш.*- изге күңелле.

**АЛМАЗ** *бор. төрк., баш.* – донъяла иң ҡаты аҫыл таш (минерал); бала нығ, үткер булһын тигән теләкте белдерә.

**АЛСЫН** *бор. баш.* – ыласын; ҡош атамаһынан.

**АНСАР** *ғәр.* – ярҙамсы.

**АРЫСЛАН** *баш.* – януар атамаһынан; батырлыҡ, ҡыйыулыҡ билдәһе.

**АЯҘ/АЯЗ** *баш.* – аяҙ, асыҡ, саф.

**БАЙМОРАТ** *баш., ғәр.* – бай+морат (теләк, ниәт); данлыҡлы әфәнде, изге ниәт.

**БАТЫР** *баш.* – ҡыйыу, үткер, батыр, баһадир.

**БАТЫРХАН** *баш.* – батыр+хан.

**БУЛАТ** *фарс., ғәр.* – иң шәп ҡорос (Дамаск ҡоросо); ҡорос һымаҡ нығ булһын тигән теләктә ҡушыла.

**ҒАЙСА** *ғәр.* — 1) *Ғайса* пәйғәмбәр исеменән; 2) *бор. йәһ. Иса* — хоҙайҙың шәфҡәте, мәрхәмәте.

**ҒАЙСАР** *ғәр.* — 1) ҡайнар шишмә; 2) Боронғо рим императоры Юлий Цезарь исеменән.

**ҒӘЗИЗ** *ғәр.* — иң ҡәҙерле, ғәзиз; кеүәтле.

**ҒӘЙСӘР** *ғәр.* – ҡайнар шишмә

**ДАНИР** *неол.* – данлыҡлы ир.

ДАНИС *фарс.* – белем, ғилем.

ДАЯН *ғәр.* – ҡылған эштәргә, гонаһтарға яза биреүсе; хөкөм эйәһе.

ДИМ *баш.* – йылға исеменән; бәлки, төрөкмән телендәгесә «тын» тигән мәғәнәгә бәйлелер.

ДИНИС *ғәр.* – *Динисламдан* ҡыҫҡартып алынған.

ДӘҮЛӘТХАН *ғәр., баш.* – бай, мөлкәтле хан.

ЗИННУР *ғәр.* — нурлы.

ИҘЕЛ *баш.* – 1) йылға, ҙур йылға; 2) *Иҙел* йылғаһы буйында тыуғанын билдәләп ҡушылған исем (боронғо йола буйынса, бала ҡайҙа тыуһа, шул ерҙең, һыуҙың атамаһын исем итеп ҡушҡандар).

ИҘЕЛХАН *баш.* – иҙел+хан.

ИЛГИЗӘР *баш., фарс.* – сәйәхәтсе, ил гиҙеүсе.

ИЛДАН *баш., фарс., неол.* – дан, халыҡтың, илдең ғорурлығы.

ИЛДАНУР *баш.* – халҡының, иленең нур сәсеүсеһе.

ИЛДАРХАН *баш.* – ил башлығы, хужаһы.

ИЛЙӘР *баш., фарс.* – илдең, халыҡтың дуҫы.

ИЛНАР *неол., баш.* – халыҡтың танылған, данлы кешеһе.

ИЛНУР *баш., ғәр.* – ил нуры.

ИЛСАФ *баш., ғәр., неол.* – ил+саф.

ИЛСУР *баш., ғәр., неол.* – ил батыры, ил дуҫы; ил башлығы.

ИЛФАР *неол.* – данлыҡлы, билдәле.

ИЛФАТ *баш., фарс.* – иленең, халҡының дуҫы.

ИЛФИР *неол.* – илдең данлыһы.

ИЛХАН *баш.* – илдең ханы.

ИЛҺАМ *ғәр.* – дәрт, теләк; илһам.

ИЛШАТ *баш.* – ил+шат (башлыҡ); ил башлығы.

ИНЙӘР *баш.* – Инйәр йылғаһы атамаһынан.

ИНСАФ *ғәр.* – инсафлы, саф.

ИРНАЗАР *баш., ғәр.* – ир+назар.

ИРХАН *бор. баш.* – ир+хан; ил башлығы; батыр хан, батыр башлыҡ.

ИРШАТ *баш.* – батыр, ҡыйыу.

ИРӘНДЕК *баш.* – тау атамаһынан (борон бала ҡайҙа тыуһа, шул ерҙең атамаһын балаға исем итеп ҡушыу йолаһы булған).

ИСКӘНДӘР *ғәр.* – батыр, ғәйрәтле, кешеләрҙе яҡлаусы (*Искәндәр* Александр исеменең ғәрәпсә әйтелеш формаһы. Александр Македонскийҙы көнсығыш халыҡтары *Искәндәр Зөлкәрняйн.* — *«Ҡушмөгөҙлө Искәндәр»* тип йөрөткәндәр).

ИСЛАМ *ғәр.* – мосолман; дин атамаһы.

ИСМӘҒИЛ *ғәр.* – һорап, теләп алған.

ИШМОРАТ *баш., ғәр.* – иш+морат; теләп алған иш, иптәш.

ИШНАЗАР *бор. төрк., йәһ.* – ярҙамсы, иғтибарлы иш, иптәш.

МИҢЛЕХАН *баш.* – миңле+хан.

НАИЛ *ғәр.* – бүләк, мираҫ; вариҫ.

НУР *ғәр.* – яктылык, нур.

НУРГИЗ *неол., ғәр., фарс.* – нур гиҙеүсе.

НУРСЫУАҠ *ғәр., баш.* – нурлы, асык ҡояш яктыһы.

НУРСОЛТАН *ғәр.* – нур+солтан; иң шәп батша, хаким.

НУРФӘИЗ *ғәр.* – нур+фәиз (киң күңелле, йомарт).

РАУШАН *неол., фарс.* – нурлы, якты нур һибеүсе.

РУШАН *неол., фарс.* – якты, нурлы; нур һибеүсе.

РӘМИС *неол., ғәр.* – билдә, тамға, үрнәк.

САЛАУАТ – 1) *ғәр.* мактаулы доғалар, намаҙҙар 2) башкорт халкының милли батыры *Салауат Юлаев* исеменән.

СЫНБУЛАТ *баш., фарс.* — сын+булат, ысын ҡорос (бала ҡорос һымаҡ нык булһын, тигән теләк менән ҡушылған).

СЫНТИМЕР *баш.* — сын+тимер; ысын, иң шәп тимер (бала нык булһын, тигән теләк менән ҡушылған).

ТАЙМАС/ТАЙМАҪ *бор. баш.* – таймаҫ, тайпылмаҫ нык

ТИМЕРХАН *баш.* — тимер+хан.

ТИМУР *төрк.* — 1336—1405 йылдарҙа Урта Азияла дәүләт эшмәкәре — әмир *Акһак Тимер* исеме менән бәйле.

ФИДАИЛ *неол., ғәр.* — абруйлы, дәрәжәле, бик яҡшы.

ФИДАН *неол., ғәр.* — фиҙәкәр, тырыш.

ШАЙМОРАТ *фарс., ғәр.* — иң якшы морат (теләк).

ШАЙНУР *фарс., ғәр.* — иң якшы нур.

ШАМИЛ *ғәр.* — ҙур, тулы эстәлекле.

ШАТМОРАТ *баш., ғәр.* — шат+морат; дәрәжәле морат.

ЮЛАЙ *баш.* — юлда тыуған; *Салауат Юлай* улының атаһының исеме.

ЮЛАМАН *баш., ғәр.* — юл+аман (балаға бәхетле ғүмер юлы теләп кушылған исем).

ЮЛДАШ *баш.* — юлдаш, иптәш, дуҫ.

## Ҡатын-ҡыҙ исемдәре

АЙБИКӘ *баш.* — ай һымаҡ матур; айлы төндә тыуған.

АЙГИЗӘ *неол., баш.* — ай+гиҙә; сәйәхәт итә.

АЙГӨЛ *баш., фарс.* — ай+гөл; ай гөлө.

АЙГҮЗӘЛ *баш.* – ай+гүзәл; айҙай, гүзәл.

АЙДИЛӘ *баш., фарс., неол.* — ай+дилә.

АЙДИНӘ *баш., фарс., неол.* — ай+динә — дөрөҫ, ғәҙел.

АЙЗАДА *баш., фарс.* — ай+зада; ай кеүек.

АЙЗИЛӘ *баш., ғәр.* — ай+зилә; ай һымаҡ.

АЙЗИӘ *баш., ғәр.* – ай нуры.

АЙЗИРӘК *баш., ғәр.* – ай+зирә; ай кеүек нурлы, зирәк кыҙ.

АЙСАРА *баш., ғәр.* – ай+сара хакимә; бикә.

АЙСОЛТАН *баш., ғәр.* – ай+солтан; башлык, хакимә.

АЙСУЛПАН *баш.* — ай+сулпан; ай янынылағы сулпан йондоҙо һымаҡ матур.

**АЙСИБӘР** *баш.* – ай һымаҡ матур.

**АЙҺЫЛЫУ** *баш.* — ай+һылыу; айлы (ай һымаҡ матур булһын, менән ҡушылған; иң күп таралған исемдәрҙең береһе)

**АЙШАН** *неол., баш., фарс.* — ай һымаҡ яҡты, айға оҡшаш.

**АЛТЫНАЙ** *баш.* — алтын+ай (кесер., ирк. Ялғауы); *Алтын* һымаҡ ҡәҙерле.

**АЛҺЫУ** *баш.* — алһыу йөҙлө.

**АҪЫЛЙӘР** *ғәр., фарс.* – аҫыл+йәр (ҡәҙерле дуҫ).

**ГӨЛБИКӘ** *фарс., баш.* – гөл+бикә; гөл һымаҡ ҡыҙ.

**ГӨЛДӘР** *фарс.* — гөл менән биҙәлгән.

**ГӨЛНАЗ** *фарс.* — гөл+наз; гөл кеүек наҙлы.

**ГӨЛНАР** *фарс.* — гранат сәскәһе.

**ГӨЛНАРА** *фарс.* — гранат сәскәһе.

**ГӨЛНУР** *фарс., ғәр* – гөл нурындай ҡыҙ.

**ГӨЛНӘЗИРӘ** *фарс., ғәр.* — гөл+нәзирә; бик матур; өлгө булырлыҡ.

**ГӨЛСИМӘ** *фарс., ғәр.* — гөл кеүек йөҙлө.

**ГӨЛФИӘ** *фарс.* — гөлгә оҡшаш.

**ГӨЛШАТ** *фарс., баш.* — гөл батшаһы.

**ГҮЗӘЛ** *баш.* — матур, һылыу, сибәр.

**ГҮЗӘЛИӘ** *неол., баш.* — гүзәл, матур, һылыу.

**ГӘҮҺӘР** *фарс.* — ынйы, мәрйен.

**ГӘҮҺӘРИӘ** *фарс.* — ынйы, мәрйен (ынйы, мәрйен һымаҡ ҡәҙерле, матур).

**ДИЛӘ** *фарс.* – 1. күңел, йөрәк, аҡыл. 2. Диләрә, Диләфрүз исемдәрен ҡыҫҡартып, иркәләп әйтеү формаһы.

**ДИНАРА** *ғәр., фарс.* – боронғо алтын аҡса атамаһынан; ҡиммәтле, ҡәҙерле мәғәнәһендә.

**ДИНӘ** *ғәр.* — динле.

**ЗӨБӘРЖӘТ** *ғәр.* — зәңгәр төҫтәге аҫыл таш исеменән.

**ЗӨЛФИӘ** *неол., фарс.* – бөҙрә сәсле.

**ЗӨҺРӘ** *ғәр.* — балҡып торған, матур; йондоҙ исеме.

**ИЛГҮЗӘЛ** *баш.* – илдең матуры, сибәре, гүзәле.

**ИЛЗИДА** *баш.* – илдең үҫеүе, көсәйеүе.

**ИЛНАРА** *баш., ғәр.* – илдең яҡтыны.

**ИЛҺӨЙӘР** *баш.* — илен һөйәр.

**КАМИЛА** *ғәр.* — кәмселекһеҙ, камил.

**ЛИЛИӘ** *неол., лат., рус.* — аҡ төҫтәге сәскә; томбойоҡ.

**ЛӘЙСӘН** *ғәр.* — «нисан» (апрель) тигән ғәрәп һүҙенән үҙгәргән.

**МАЯНҺЫЛЫУ** — маян+һылыу ҡара: *Баянһылыу, Баян.*

**МИЛӘҮШӘ** *фарс.* — миләүшә сәскәһе.

**МИҢЗАДА** *баш., фарс.* — миңле; бәхетле; иң һәйбәт бала.

**МИҢЗИЛӘ** *неол., баш., ғәр.* — миң+зилә; матур, бәхетле.

**МИҢЗИӘ** *баш., фарс.* – миңле, бәхетле зия (нурлы, яҡты).

**МИҢЛЕГӨЛ** *баш., фарс.* — миңле+гөл; миңле, бәхетле.

МИҢНУР *баш., ғәр.* — миңле, нурлы.
МӘҘИНӘ *ғәр.* — Ғәрәбстандағы изге ҡала исеменән.
МӘЛИКӘ *ғәр.* — хакимлыҡ итеүсе.
НАҘГӨЛ *неол., фарс., баш.* — наҙ+гөл; гөл һымаҡ наҙлы.
НАЗА *фарс.* – наҙлы, иркә.
НУРАНИЯ *ғәр.* — нурлы, яҡты.
НУРГИЗӘ *неол., ғәр., фарс.* — нур+гиҙә; нурҙа гиҙә.
НУРГӨЛ *ғәр., фарс,* — нур+гөл.
НУРЗАДА *ғәр., фарс.* — нурлы бала.
НУРЗИДӘ *неол., ғәр., фарс.* — күҙ нуры.
НУРЗИЛӘ *неол., ғәр.* — нур+зилә (нуры саф; саф ҡыҙ).
НУРИЯ / НУРЫЯ *ғәр.* — нурлы.
НУРСИЛӘ *неол., ғәр.* — нурлы; нур ташҡыны.
НӘРГИЗӘ *неол., фарс.* — гөл исеменән.
НӘРКӘС *фарс.* — гөл исеме (матур күҙле).
НӘФИСӘ *ғәр.* — матур, күркәм.
РАЙХАНА *ғәр.* — рәхәтлек; гөл исеме.
РАНИЯ *ғәр., фарс.* – 1) матур; 2) сәскә.
РАУШАНИЯ *фарс.* — нурлы.
РЕЗЕДА *фран., неол.* – резеда сәскәһе; күкһел сәскәле хуш еҫле гөл.
РУШАНА *неол., фарс.* — *Раушан* исеменән: яҡты, нурлы; нур һибеүсе.
СУЛПАН *баш.* — таң йондоҙо.
СӘЛИМӘ *ғәр.* — сәләмәт, иҫән-һау; пак, ғәҙел.
ТАҢГӨЛ *баш., фарс.* — таң+гөл (таңдан сәскә атҡан гөл; таңда тыуған бала).
ТАҢСУЛПАН *баш.* — таң йондоҙо, сулпан.
ТАҢҺЫЛЫУ *баш.* — таң+һылыу; таңда тыуған бала.
ФАТИМА *ғәр.* — имсәктән айырған бала (Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең ҡыҙының исеме — Гафуров).
ФИРҘӘҮЕС *фарс.* – баҡса, йәннәт баҡсаһы.
ФИРҮЗӘ *фарс.* — аҫыл таш.
ФӘЙРҮЗӘ *фарс.* — йәшел төҫтәге аҫыл таш исеменән.
ШӘҮРӘ *ғәр.* – танылған, мәшһүр.
ШӘФӘҠ *ғәр.* — эңер ҡыҙыллығы, нуры (кис, эңерҙә тыуған).
ЫНЙЫ *баш.* — аҫыл таш исеменән; бәхет килтереүсе, ынйы кеүек ҡәҙерле.
ЫНЙЫГӨЛ *баш., фарс.* – ынйы+гөл.
ЫНЙЫҠАЙ *баш.* — ынйы+ҡай; үтә ҡәҙерле.
ӘҘИЛӘ *ғәр.* — ғәҙел, тура һүҙле.
ӘЙШӘ *баш.* – 1) айға оҡшаған; 2) *ғәр.* – оҙон ғүмерле.
ӘЛИӘ *неол., ғәр.* – бөйөк.
ӘМИНӘ *ғәр.* — тыныс тәбиғәтле; ышаныслы, тоғро.
ЯҘГӨЛ *баш., фарс.* — яҙ+гөл; яҙ һымаҡ матур гөл, сәскә.

М. Ғәлләм (Өфө)

## Сөннәт

Сөннәт ғәрәпсә "хитан" тип атала. Беҙҙә ир баланың енес ағзаһы осондағы тире ҡатламын киҫеп алыуҙы сөннәткә биреү тиҙәр. Ислам динендә ир баланы сөннәткә биреү бер дини вазифалыр. Йәғни мосолман булыуҙың бер билдәһе ул. Мосолмандар балаларын төрлө йәштә, ә йәһүдтәр бала тыуып етенсе көндә сөннәткә бирәләр. Баланы сөннәткә биреүҙең билдәле бер йәше юҡ. Шулай ҙа, риүәйәттәргә ҡарағанда, ете менән ун ике йәш араһы иң яҡшыһы тип һанала.

Сөннәткә бирелмәгәндәр төрлө сирҙәргә дусар булыуы ихтимал. Табиптар аңлатыуынса, сөннәтле булыу ирҙәрҙе енес органдары яман шешенән, йәғни рактан, ҡатын-ҡыҙҙарҙы аналыҡ юлдарындағы яман шештән һаҡлай.

Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, сифилис, гонорея һәм башҡа йоғошло ауырыуҙар сөннәтле булмағандарҙа күберәк осрай. Француз ғалимдары был сирҙәрҙе "Affection du prepuce" исеме менән атай һәм уларҙың бик ҡурҡыныс икәнлеген иҫбатлай. Быларҙың бер нисәүһе үтә ҡурҡыныстарҙан һанала. Был сәбәптән Европа һәм Америка христиандары сәләмәтлектәрен һаҡлау өсөн үҙҙәрен һәм балаларын сөннәтле итәләр. Ә инде профессор, доктор Дубаис Раймондтың: "Сөннәт сәсәктән прививка кеүек бөтә ирҙәргә мәжбүр," - тигән һүҙҙәре сөннәттең әһәмиәтенә баҫым яһай.

Сөннәттең тарихы ла бик боронғо замандарҙан башлана. Мосолмандарҙа барлыҡ ир балаларҙы бәлиғ булғанға тиклем сөннәткә бирәләр.

Сөннәткә бөтә ғаилә әҙерләнә. Һандыҡтан иң яҡшы әйберҙәр сығарыла, өй матур итеп биҙәлә. Сөннәткә бирeләсәк баланың бүлмәһе зиннәтле әйберҙәр менән биҙәлә. Баш аҫтына изге Ҡөрьән Кәрим китабы ҡуйыла.

Сөннәт көнөндә баланы матур, таҙа итеп кейендерәләр, атҡа ултыртып йөрөтәләр, әүлиә ҡәберенә алып баралар. Туғандары, ҡәрҙәштәре өйгә инеп бүләктәр бирә. Сөннәткә биргәнсе Ҡөрьән аяттары уҡыла. Нәҫел-нәсәптән дәрәжәһе булған бер кеше баланың янында ярҙамсы булып тора. Һөнәрендә оҫталығы менән дан тотҡан сөннәтсе бер ауаздан тәкбир әйткән арала сөннәт эшен тамамлап ҡуя. Ятҡан балаға "Мәшәаллаһ, Бәракаллаһ" тип хәйер доғалар уҡыйҙар. Килгән ҡунаҡтарға сөннәт туйына тип әҙерләнгән ризыҡтарҙы ашаталар. Ҡунаҡтар ир баланың янына инеп бүләк тапшыра.

Хәҙерге ваҡытта был ғөрөф-ғәҙәттәребеҙ, боронғо кеүек булмаһа ла, ябайлаштырылып һәр ерҙә дауам итә. Күп ғаиләләр сөннәткә биреүҙе фарыз итеп ҡабул итә.

Күп кенә хәҙис-шәрифтәр мәғлүмәттәренә ҡарағанда, бөтөн пәйғәмбәрҙәр сөннәтле булып тыуғандар. Ләкин бер нисә хәҙис-шәрифтә бәйән ителгәнсә, Пәйғәмбәрҙәребеҙ Ибраһим хәҙрәте сөннәтһеҙ булып донъяға килгән. Ул 80 йәшендә үҙен үҙе сөннәтле иткән. Башҡа риүәйәттәргә ҡарағанда, хәҙрәти Исмәғил 13 йәшендә сөннәткә бирелгән.

Ә Пәйғәмбәребеҙҙең ейәндәре Хәсән менән Хөсәйенде тыуғандан һуң етенсе көндә сөннәткә биргәндәр.

Ф.Г. Хисамитдинова (Уфа)

## Традиционные поминально-погребальные обряды башкир

Башкиры считали, что смерть – это переход души человека в новое состояние.

Хоронили башкиры по мусульманскому обряду. Узнав о безнадежном состоянии больного, приглашали муллу, который читал над умиравшим суру из Корана – ясин – обещание райских блаженств верующим. Как только узнавали о смерти, в дом покойника собирались люди. Несколько человек, обычно пожилые по очереди сидели возле умершего и читали молитвы. По поверьям, бдение было необходимо каждому, даже новорожденному, иначе в покойника могла войти нечистая сила. Во избежании этого на умершего клали нож, монетки и другой железный предмет и ни на минуту не оставляли одного.

Умершего старались похоронить как можно скорее. Обычно похороны организовались в тот же день, если смерть наступила утром, если же под вечер – то похороны переносили на следующий день. Такая поспешность погребения основана на законе шариата, который гласит, что от смерти до погребения – самое мучительное время для души, а потому и стараются сократить мучения ее.

В день погребения умершего обмывали (мужчину – мужчины, женщину – женщины), облачали в саван – кэфен. Воду для омовения набирали, держа ковш «от себя». Все делалось иначе, не как при жизни. Перед выносом покойного из дома происходило чтение присутствующими молитвы. На кладбище покойника несли на особых носилках, читали заупокойную молитву йыназа, затем опускали умершего в лэхэт и засыпали могилу землей. После этого опять читались молитвы и присутствующим раздавали хайер – добровольное подаяние кусочками мыла, носовыми платками, деньгами и проч.

После похорон все отправлялись по домам. Раньше в доме, где находился покойник, в течение двух суток пищу готовить было нельзя, только на третий день по умершему справляли поминки. Согласно доевним верованиям, поминки представляли собой кормление мертвых. Души умерших предков, по представлениям башкир, влияли на живых, поэтому заботу о них должны были проявлять родственники. Поминки были не только памятью о покойном, они должны были обеспечить нормальный переход души в новое обиталище.

По мусульманским обычаям, поминки следовало проводить на третий, седьмой, сороковой, иногда пятьдесят первый (или пятьдесят второй) день после смерти и через год.

Р.Ә. Солтангәрәева, Ә. М. Сөләймәнов (Өфө)

## Ерләү йолалары

### Беренсе көн

Ауырыуҙы эргәһендә ултырып һаҡлайҙар. Йән биреүсе яңғыҙ ҡалырға тейеш түгел. Йәне китеү еңел булһын тип аят уҡыйҙар. Ауырыуҙың хәле бик насарланғас, ясин сығалар. Уның битенә аҡ яулыҡ йә таҫтамал һалалар. Күсә бөткәс, йәне оҙон тын булып сыға. Йәне аҡҡа сыҡһын тип, ауыҙын буҙ йә туҡыма менән ябалар. Мәрхүмдең күҙен тәңкә йә 5 тинлек баҡыр менән дә ябалар, ауыҙы асылмаһын өсөн, эйәк аҫтына, төйнәп, сепрәк һалып, ауыҙын таҫтамал менән ябып, тәңкә баҫып ҡуялар. Өй эсендә булған фотоһүрәттәр, китаптар, күҙгә һәм ялтыр әйберҙәр ябыла Төнөн мәрхүмде көтәләр (янында алмашлап ҡуналар). Көткәндә, ут яндырып, тәсбих әйтеп ултыралар.

### Мәйет көтөү

Япма менән ябылған урындыҡтарҙа барыһы бергә өсмөйөш яһап ултыралар. Мәрхүм ятҡан күтәрмә уларҙың эргәһендә була. Өсмөйөштөң уртаһында мәрхүмдең иң яҡын туғандары ултыра. Улар янына ҡымыҙлы аяҡтар* ҡуйыла. Өсмөйөш башына абруйлы аҡһаҡал, уның ике яғына ике мулла ултыра. Улар мәрхүмдең гонаһтарын ярлыҡауҙы һорайҙар, доға уҡыйҙар ҙа ҡымыҙ эсәләр. Ошонан һуң әруахҡа бағышлап табын асалар. Табындағы ризыҡты килеүселәр генә түгел, үткенселәр ҙә ауыҙ итә. Ауыҙ итеп кенә ҡалмай, туйғансы ашауҙары ла фарыз.

Аштың башы – бишбармаҡ менән йылҡы ите. Ит ҙур-ҙур дүрт табаҡҡа турап ултыртыла.

Аҡһаҡал (старшина) һәм уның ярандарына айырым ҡәҙер-хөрмәт күрһәтелә;һәр кем уларға ҡалъя һоғондорорға тырыша.

Иттән һуң һурпа эсәләр ҙә, шөкөрана әйтеп, иман тоталар, хужаға рәхмәттәрен әйтәләр.

Әруахҡа бағышланған мәжлескә, әйтеүҙе көтмәҫтән, йыназа һөрәнен ишеткәс тә киләләр.

Мәрхүмгә бағышлап, сөсө ҡамырҙан ҡырҡ бер көлсә бешерәләр.

Үлгән кешене хөрмәтләү йөҙөнән төпкө бүлмәгә һалалар. Түшәмгә, мәрхүм ятҡан күтәрмәгә артыш ҡуялар.

Мәйет янына ҡатындар килһә, өс икмәк тотоп килә. Унда береһен ҡалдыралар, икәүһен кире алып ҡайталар. Йәнәһе, теге донъяла үлеккә бер кешелек кенә ризыҡ кәрәк, артығы ярамай.

Ҡайтмаҫ ергә оҙатҡанда, йыназа намаҙы фарыз: һәр кем уҡыһа – мең һауап, аранан береһе уҡыһа – барыһына һауап, береһе лә уҡымаһа – гонаһ.

## Икенсе көн

Бөтөн ауыл үлгән кешегә хәйер (еп, кәтүк, һабын һ.б.) килтерә. Мәйеттең күлдәген сисмәйҙәр, ярып алалар. Иртән мәрхүмдең мәйетен йыуалар. Әгәр үлгән мәле иртән булһа, шул уҡ көндә йыуалар. Ирҙәрҙе – ирҙәр, ҡатындарҙы – ҡатындар йыуа. Мәйет йыуа торған һыуҙы алырға барғанда, һөйләшмәйҙәр. Һыуҙы ағым ыңғайына һоҫоп алалар, алып ҡайтҡанда, биҙрә өҫтөнә ябыу һалалар. Һыуҙы кеше күҙе күрергә тейеш түгел. Юғиһә, "бысрай" йә "ен күҙе тейә", ти. Мәйетте тәүҙә ике таҡтаға йә улаҡҡа һалалар. Йыуғанда, дүрт кеше дүрт мөйөшөнән ҡоршау тотоп, мәйетте пәрҙә менән ышыҡлап тора, бер кеше һыу бирә, ике кеше миндек йә бейәләй менән йыуа. Мәйет йыуыусының изге күңелле, кеше ғәйебен һөйләмәҫ кеше булыуы шарт. Ҡатындарҙы һигеҙ кеше йыуа. Мәйет йыуа торған һыуҙы йылытҡан һауыттар бер иш булырға тейеш. Ике сәйнүкте тултырып мейес өҫтөнә һыу йылытырға ҡуйһаң, картинәйем: "Үлек йыуырға ултыртмағанһың бит, ал бер сәйнүгенде", - тип әйтә торғайны. Мәйет йыуғанда махсус бейәләй кейәләр (бер ҡат йыуған һайын алмаштырып торалар), алъяпҡыс бәйләйҙәр. Һыуҙы һауыттан һауытҡа һалғанда, ҡулдың һыртын әйләндереп, кирегә бороп һалалар.

Иң тәүҙә мәйеттең эстәрен йомшаҡ ҡына һыпыралар. Берәй нәмә бүленеп сыҡһа, сайҙырып ебәрәләр. Башлап истинжа ҡылдырыла*. Унан һуң мәйет йыуғанда кейгән тәүге бейәләй сиселә, икенсеһен кейәләр, мәйетте шуның менән йыуып бөтәләр. Шунан һуң мәйеткә тәһәрәт алдырыла. Башта һабынлап беләҙектәренә тиклем ике ҡулы, унан йөҙө, һуңынан ике ҡулы терһәктәренә тиклем йыуыла. Шайтан ашыҡтарына тиклем ике аяғы йыуыла. Барыһы ла өсәр ҡат ҡабатлана. Ауыҙ-моронона һыу индерелмәй. Бынан һуң мәйеттең башы, бер йә өс кәррә* йәнә йыуып төшөрөлә. Шунан уң ҡабырғаһында әйләндереп йыуыла, йыуылмаған урындары ҡалмаҫҡа тейеш. Шунан мәйетте сайындырып, таҙа сепрәк менән ҡоротоп һөрткәс кенә кәфенләйҙәр. Мосолмандар мәйетте ултыртып ҡуйондора.

Үлек йыуылған улаҡты шунда уҡ һүтәләр. Таҫтар, ҡоршау (пәрҙә) тотоп торғандарға таҫтамал бирәләр.

Мәйет йыуырға алып ҡайтҡан һыуҙы ҡулланып бөтөргә кәрәк, бөтмәһә, йорттан йәнә мәйет сыға. Мәйет йыуған һыуҙы кеше баҫмай торған ергә, ағас төбөнә ҡүмәләр. Хужа унда үҙенең билгеһен һала. Мәйет йыуған бейәләйҙе һаҡлайҙар. Мәрхүмдең бөтә кейемен йыуып, һыҡмай ғына тиҫкәре яғын әйләндермәй эләләр.

Золом ҡылып, эсеп йә үҙенә ҡул һалып үлгәндәрҙе йыумағандар.

## Мәйетте кейендереү

Мәрхүмде кейендергәндә уға иң алдан баштан алып тубыкка тиклем "ожмах күлдәге" тегелә, арка яғына булмай. Кейем теккәндә бер төйөн дә булырға тейеш түгел. Тиҙерәк һүтелергә уңай булһын өсөн, шулай итәләр (сөнки, әгәр мәрхүм ожмахка эләкһә унда уға яңы кейем бирәсәктәр). Мәрхүмдең битенә "бөркәнсек" ябалар. Аҫтына аҡ тауарҙан түшәк һалалар, ҡулына бейәләйҙәр тегеп кейҙерәләр.

Кәфенде аҡ әйберҙән тегәләр. Ҡатындарға – ете, ирҙәргә биш ҡат итеп бүләләр. Халыҡ хәтерендә кәфен иҫәбе шулай һаҡлана. Дини тәртип, ислам ҡағиҙәләренсә, ир кеше мәйете булғанда – кәфен өс ҡат, ҡатын булғанда – биш ҡат булыуы сөннәт. Теккәндә, энәне кирегә ҡаратып сәнсәләр. Еп бөтһә лә, төйөн төйнәмәйҙәр, тегелгәндең өҫтөнә ҡайтара биреп тегеп ҡуялар.

Кәфендең һәр бер ҡатының исеме бар. Беренсе ҡат – ләфнә - тышҡы урау. Икенсе ҡат - әҙер – эске яҡтан урау. Өсөнсө ҡат – лифафа – оҙон әхирәт күлдәге, баштан аяҡҡа тиклем кейҙерелә. Дүртенсе ҡат – ғәүрәт ябыуы – йән еренә ябыу (ир затынан булған мәйеттең йән ерен ябырҙан әүәл уның өҫтөнә бармаҡ буйы ҡушсатлы ағас һалалар. Был түл өҙөләүҙе аңлата). Бишенсе ҡат – түшенә түшелдерек ябыу. Алтынсы ҡат – яулыҡ йә бөркәнсек тип атала. Уныһы әхирәт күлдәгенә ҡуша тегелә. Мәрхүмдең башын ҡаплай. Етенсе ҡат – билбау, өс ҡат уратып билгә бәйләнә. беренсе ҡат кәфен баштан алып аяҡ осона етерлек була. Икенсе ҡаты кешенең буйы менән типә-тиң була. Өсөнсөһө (әхирәт күлдәге) – баш яғынан да, аяҡ осонан да сығып тора. Ике остан да һығып бәйләрлек булһын өсөн шулай итәләр. Ирҙәрҙең әхирәт күлдәге тубыҡ аҫтына төшөп тора.

Ирҙәрҙең башына сәллә тегелә. Уның бер осо һалынып, мәрхүмдең арҡаһына төшөп торорға тейеш.

Бәләкәй мендәр тегеп, эсенә мәтрүшкә тултыралар ҙә мәрхүмдең башы аҫтына һалалар. Кәберҙә лә башы аҫтында шул була.

Кәфен теккән еп артып ҡалһа, хәйер итеп, берәй ғәрипкә, етемеһергә бирәләр. Ул епте ташларға йә өйҙә ҡулланырға ярамай.

Мәйет һаҡлағанда, ун ике кеше 99 йә 100 мәртәбә "лә илаһи" тыңлай. Бер мулла әйтеп, уҡып ултыра. Әгәр кеше иҫәбе тулмаһа, түлдән (ырыуҙан) ҡалған ҡатындар керә. Барыһына ла ҡырҡ бер кәррә һалымланған еп тараталар.

Мәрхүмгә йыназа уҡыла.

Уны уҡыу өсөн ҡайһы бер йола-шарттарҙың үтәлгән булыуы фарыз: тәһәрәтле булырға (һәр кемгә ғосол ҡойонорға) тейеш; кейемдәре таҙа, баш кейеме ҡағып-һуғып таҙартылған; бөтә урын,

ултырған урындыҡ, баҫҡан ер таҙа булырға тейешле (йән сыҡҡан йорт эсендә сабата олтораҒына тиклем йыуыла, сөнки, йән биргәндә, йәғни Ғәзраил фәрештә салып ебәргәндә, әҙәмдең ҡаны ҡырҡ аҙымға тиклем һәммә ергә сәсрәй, ти); мәрхүмдең башы ҡибла яҡҡа ҡаратып һалынырға: мәйет йыуылған булырға; уның донъялыҡтағы бурыстарын яҡын туғандары үҙҙәренә алырға (түләр өсөн), мәрхүмдең ниәте атҡарылған (төҫөм итеп, бүләк итеп фәлән-фәләнгә ҡалдырам тигән әйберҙәре тапшырылған) булырға тейеш.

### Өсөнсө көн

Мәрхүм менән хушлашырға, бәхилләшергә бөтә ауыл килә. Һәр береһе яулыҡ, таҫтамал, һабын, туҡыма, аяҡлы еп, еҫле май алып килә. Барыһын да мәрхүмдең уң яҡ яуырынына һалалар. Ошо ваҡыт, үлгән кешенең ҡорҙашы (ҡатын-ҡыҙҙың әхирәте) уның исеменән яҙып ҡалдырылған хушлашыу һүҙҙәрен уҡый башлай. Ул юлдар, мәрхүмдең баш осона ултырып, иламһыраған тауыш менән көйләп уҡыла:

- Йәйҙәргә инһәм, йөрөрмөн, тинем,
Хуш-еҫтәр еҫкәп, терелермен, тинем.
Әжәл шарабын эсәбеҙ икән,
Яҡты донъянан китәбеҙ икән.
Күҙем йомһам да, күҙҙәрем тала,
Барса ғәкрәбем* донъяла ҡала.
Һеҙгә, дуҫтарым, - яҡтыҡ һүҙҙәрем,
Доға уҡығыҙ, йомһам күҙҙәрем.

Былдай хушлашыу, бәхилләшеү һүҙҙәрен һәр бер кеше үҙе сығара йә берәй сәсәнерәк кешенән сығартып, уҡый-яҙа белгән әхирәтенә йә ҡорҙашына ҡалдыра. “Мин үлгәс, мәйетем эргәһендә көйләрһең”, - тип әйтеп ҡуя. Көйлә илау һамаҡтарын ҡалғандар тәсбих тарта-тарта тыңлап ултыра.

Тағы 100 тапҡыр “лә илаһи” тип әйткәндән һуң мәрхүмдең өҫтөнән Ҡөрьән йөрөтәләр. Шунан уны башы менән өйҙән алып сығалар.

Арба ҡуҙғалғансы, ике һыбай шәп итеп ауылды әйләнеп сыға. Үҙҙәре: “Йыназаға барығыҙ!” – тип ҡысҡыра. Йола буйынса мәрхүмде ҡояш байығанға тиклем күмәләр.

### Дәүер итеү

Һәр мосолман кешеһенең был донъяла биш фарызы була: әүәл иманды яҡшы белмәк, икенсе – биш ваҡыт намаҙ, өсөнсө - раҙа, дүртенсе – зәкәт, бишенсе – хаж ҡылмаҡ.

Кеше үлгәс, дәүер итәләр. Дәүер иткән саҡта уның донъялыҡта үтәлмәгән фарыз бурыстарын әйтәһең. Миҫал килтерәйек:

- Мөхәмәтзариф Мәхмүзә балаһының бер йылғы фарыз булмыш салатасауымының ошбу фидиәһен ҡабул итеп алдыңмы? – тиһең, бер төйөнсөктө мәйеттең күкрәге тәңгәлендә ултырған кешегә аша тотторол. Ул кеше:

- Ҡабул итеп алдым, - ти.

Ни өсөн әсәһен әйтәләр? Сөнки ҡайһы бер ҡатындар, урамда йөрөп, атаһыҙ бала таба. Шуның өсөн. Ҡыҙ биргәндә, атай исеме әйтелә.

Үлгән кеше һикһән йәштә булһа, уның ҡырҡ йәшенә әйтәһең.

Шунан тағы шундай нәмәһе лә бар. Кешенең йәшенән бәлиғ тулғанға тиклемге дәүере алып ташлана. Боронғо китап буйынса ир заты ун ике йәштән, ҡатындар заты һигеҙ йәштән бәлиғ була. Йәнә шул: утыҙ йәш һайын бер йәш өҫтәйһең. Йәш кеше үлһә, йәшәгән йәшен уртаға бүлеп тормайҙар. Миҫалға, әгәр кеше ҡырҡ йәштә үлһә, балиғ булғанға тиклемгеһен алып ташлайҙар ҙа утыҙ һигеҙ мәртәбә "Алдыңмы?", "Алдым" әйтәләр.

## Мәрхүм менән бәхилләшеү

Элегерәк мәйетте урап, ҡабыҡҡа (йүкә ҡайырыһының эсе) һалғандар. Ҡатын кеше тим ағасына һалынғас, өҫтөнә япма ябып, күтәрмә-көймә эшләр булғандар. Үлгән кешене оҙатҡанда, табанына ҡарап калырға ҡушҡандар. Әгәр өйҙә ике үлек булһа, береһен ишектән, икенсеһен тәҙрәнән алып сығалар. Шулай итһәң, үләт туҡтай. Мәйетте ихатанан алып сығып киткәндә, 99 ҡабат тәһлил* әйтәләр, еп тарататалар. Әбейҙәр әйтемләп калалар:

- Бәхил бул, тыныс йоҡо!
- Ауыр тупрағың еңел булһын!
- Тар урының киң булһын!
- Ҡара гүрең яҡты булһын!
- Урының йәннәттә булһын!
- Тыныс ят!
- Йыш ҡайтып йөрөмә!
- Төшкә йыш кермә!
- Йәп-йәштәрҙе саҡырма!
- Артың теүәл, артыңдан саҡырма!
- Бәхил бул!

Хушлашыусы мәрхүмдең күкрәгенә уң ҡулын һалып: "Рәнйетһәм, ғәфү ҡыл! Бәхил бул! Бәхил бул! Бәхил бул!" – ти.

Хушлашыу йыназаһы уҡылғас, бөтәһе тороп “амин” әйтәләр. Мәйетте өйҙән алып сығып киткәс, карттар ҡиблаға ҡарап:

- Аллаһы әкбәр,
Аллаһы әкбәр,
Лә Илаһи иллалла! –

Тип көйләп тәкбир әйтәләр. Шуны дүрт тапҡыр әйтеп, ике тарафҡа сәләм бирәләр. Ишек алдында, ҡапҡанан сыҡҡас, ошо “тәкбир әйтеү” ҡабатлана. Йыназа уҡыусыға тейешле әжер* әйтелә. Ул дүрт тояҡлы мал булырға тейеш. Боронғолар, йыназа уҡыусыны, мулыраҡ әжер биреп, нығыраҡ һыйлаһаң, ул мәрхүмде ожмахҡа урынлаштыра тигәндәр. Ихата, урам, ауыл ҡапҡаһын үткәндә, көйләп, шулай тип ҡалалар:

- Һығынамын солтаныма,
Яраткан яппарыма*.
Сәләм әйткел мәҡамыма*,
Ятасаҡ тупрағыма!
Хуш! Хуш! Хуш! Бәхил бул!

Мәрхүм тереләрҙән ошо сәләмде тупраҡҡа еткерә торһа, үҙенә һауап була, оҙатып ҡалыусылар ҙа һауаплы була. Барасаҡ мәҡамға сәләм әйтеү өс рәт ҡабатлана.

Ҡатындарға зыяратҡа инергә ярамай. Улар мәрхүмде ҡапҡа тышына тиклем генә оҙата бара. Бала-сағаға, ҡыҙҙарға зыяратҡа инергә рөхсәт. Табутты таҫтамал менән яурын аша һалып, алты ир күтәрә. Уларҙы башҡалар алмаштыра. Тим ағасындағыһын күмәкләнҡерәп һәм алмашлап күтәрергә тырышалар. Күтәреүселәр сиратлаша.

## Ҡәбер ҡаҙыу

Ҡәберҙе, ғәҙәттә, мәрхүмдең яҡындары ҡаҙа. Ҡәбер ауыҙы асыусы алдан билдәләнә.

Кеше үлеүен, уның ҡасан ҡуйылыуын белгәс, урам буйлап, бер-ике кешенең көрәк күтәреп китеүен күреү менән уларға башҡа ирҙәр ҙә өнһөҙ эйәрә. Саҡырыу булмай.

Ҡәбер өсөн урын таҙа, йәғни иҫке ҡәбер булмаған ерҙән һайлана, мәрхүмдең буйына ҡарап ҡаҙалар. Ир кешегә кендек тиңенән дә ярай, ҡатындарға түш тиңенән ҡаҙыла.

Сокорҙоң ҡибла яғынан кеше һыймалы, ултырғанда, башы теймәҫлек уйым яһала (уны ләхет алыу тиҙәр). Шул рәүешле үҙенсә бер “өй” барлыҡҡа килә. Йәнәһе, мәйетте күмеп, кешеләр ҡайтып киткәс, һорау алыусы фәрештәләр Нәңкер менән Мөңкөр килә һәм үлек, тороп ултырып, уларға яуап бирә була.

Ҡәбер әҙер булғас, мәйетте килтергәнсә, соҡор янында кеше һаҡта торорға тейеш. Юҡһа, ҡараусыһыҙ ҡалған ҡәбергә ен-шайтан эйәләшә.

Ҡәбер тупрағына баҫырға, тәкерергә, абынырға ярамай. Ҡаҙыусылар тәһәрәтле, пак булырға тейеш. Ҡысҡырып һөйләшеү, көләшеү ҙә ҡәтғи тыйыла, юғиһә, ҡәбер эйәһе рәнйей, уның йәне уларға зыян ҡылыуы мөмкин.

## Мәйет оҙатыу

Мәрхүмде алып киткәндә, бөтә ауыл эштән туҡтай, тауыш тын сығарырға, йырларға, күңел асырға ярамай. Мәрхүмде арбаға һалып алып барғанда лә, ҡәбер янында ла мулла биш-алты кешенән саф теҙә. Зыяратҡа алып китер алдынан оҙата барыусыларға "сәфәр хәйере", таҫтамал, яулыҡ таратыла. Мәйетте илау менән алып барғанда, ат башын тотоп барған кешегә лә "сәфәр хәйере"нән таҫтамал бирәләр. Ҡөрьән уҡыусыға фиҙиә саҙаҡаһы* бирелә.

Зыяратҡа алып барғанда, мәрхүмдең кәфене өс урындан: башы, аяғы, биле тиңенән бәйле була. Ҡәбергә төшөргәнсе кәфен бауҙарын сисергә ярамай: мәрхүмдең тәһәрәте китә тиҙәр.

Зыяратҡа ингәндә, карттар туҡтап тағы тәкбир әйтә, ҡәбер янында тағы туҡтап тәкбир әйтә. Дүрт кеше ҡәберҙең дүрт мөйөшөнә ултырып тәһел әйтә, мулла йыназа уҡый. Шунан ул халыҡтан һорай:

- Йә, йәмәғәт, был яҡшы кеше инеме?

- Яҡшы кеше ине! – тип яуап бирәләр.

Һорау-яуап шулай өс рәт ҡабатлана.

- Кем бурысын ала?

- Мин алам! – ти яҡын туғаны. Мәрхүмдең бурысын алған кешегә мал әйтелә.

Мәрхүмде ҡәбергә өс таҫтамал менән төшөрәләр: бил, баш, аяҡ тиңенән алып.

## Һүҙлек

**Ғәкрәбем** – (хәкрәбем – *ғәр.*) – туған-тыумасам, ҡәрҙәштәрем.

**Истинжа** – (*ғәр.*) тәһәрәттән һуң пакланыу, таҙарыныу, йыуыныу.

**Кәррә** - (*ғәр.*) мәртәбә, тапҡыр, рәт, ҡат.

**Ҡымыҙлы аяҡ** - Ҡымыҙлы һауыт (туҫтаҡ).

**Мәҡам** (*ғәр.*) – 1) тора торған ер урын; 2) дәрәжә тотҡан урын.

**Тәһлил әйтеү** (*ғәр.*) – "Лә иләһи илләллаһ!" йәғни "бер Алланан башҡа Алла юҡ" тип күп ҡабатлау.

**Фиҙиә саҙаҡаһы** (*ғәр.*) – йолом. Үлгән кешенең гонаһын йолоп алыу өсөн бирелгән мал һ.б.

**Әжер** – башҡарылған эштең һибәһе, хаҡы, түләме.

**Яппар** (жаббар – *ғәр.*) – кеүәтле яуыз, бәһлеүән, тупраҡ.

Н.И. Әсәҙуллина (Өфө)

Күмеү йолаһы

Берәр кешенең үлгәнен ишетеү менән, халыҡ мәйет сыҡҡан йортҡа йыйыла. Мәйет янына тәһәрәт алып, таҙа кейемдәр кейеп килергә кәрәк. Ысын күңелдән Аллаһы Тәғәлә ризалығы өсөн, әруахтың рухына бағышлап, доғалар уҡыла. Мосолман кешеһенә, мәйет янына барыу, уның янында ултырыу, төндә көтөү һауаплы һанала. Ислам дине буйынса үлгән кеше, берәр сәбәбе булмаһа, тиҙерәк күмелергә тейеш. Күмер алдынан үлгән кешене йыуалар. Мәйетте йыуғас, тәрәнә торған юрғаны йәйелә, шунан ике ҡатлы кәфен һалына: тышҡы кәфен, эске кәфен. Шунан әхирәт күлдәге кейҙерелә.

Ир-аттар иртән ҡояш сығыу менән, ҡәбер ҡаҙырға китәләр. Ҡәбер әҙер булғанда мәйет тә йыуылып бөтә. Үлекте махсус тамбалға һалып йыуалар. Йыуынты һыуын өйҙән ситтәрәк, кеше йөрөмәгән ерҙә сокор ҡаҙып, күмәләр. Мәйетте алып сыҡҡан ваҡытта аяҡ яғы менән сығаралар. Өйҙән бер аҙ ситкә китеп, табутты бер таҙа ергә ҡуйып, йыназа намаҙы уҡыйҙар. Йыназа намаҙына тәһәрәте булған кеше генә баҫа. Мәйетте, зыяратҡа алып барғанда, күтәреп алып баралар. Ҡатын-ҡыҙҙар зыяратҡа бармайҙар. Мәйет булған йортта ҡысҡырып иларға ярамай. Өйҙән мәйет сыҡҡас, өйҙөң ҡабырғаларына ҡәҙәр, тәҙрә, пәрҙә, һауыт-һаба бик һәйбәт итеп йыуыла. Был таҙалыҡ өсөн эшләнә. Өйҙә мәйет барҙа бер ике көн ашарға, аш-һыу әҙерләргә ярамай.

*Мәйетте оҙатыу буйынса бер-нисә кағиҙә:*

- мәйет янында кәрәкһеҙ һүҙ әйтелмәй, мәжбүр булғанда ғына һөйләшелә;
- ҡыҙыҡ һүҙҙәр әйтеп, көлөнмәй;
- мәйетте оҙатыусылар мәйеткә мөмкин ҡәҙәр яҡын йөрөргә тейештәр;
- мәйеттең алдында, артында, уң йәки һул яғында йөрөү дөрөҫ була. Артында йөрөү яҡшыраҡ. Сөнки Пәйғәмбәребеҙ мәйеттең артынан йөрөгөҙ" – тип бойорған. Хәҙрәти Ғәли ҙә: «Мәйеттең артынан бар! Ике күҙең менән мәйеткә ҡара. Мәйет бер өгөттәр, нәсихәттәр, әхирәтте иҫкә төшөрөр. Унан ғибәрәт алығыҙ»,— тигән.

*Мәйетте күмергә ярамаған ваҡыттар:*

- ҡояш сыҡҡанда;
- ҡояш байығанда;
- мәжбүрилек булмаһа, төндә мәйетте күммәйҙәр. Пәйғәмбәребеҙ: "Мәжбүр булмаһағыҙ, мәйеттәрҙе төндә күммәгеҙ", – тип бойорған.

*Йыназа намаҙын уҡыу тәртибе:*

Мәйетте йыуыу, кәфенләү, күмеү һәм йыназа намаҙын уҡыу мосолмандарға фарыз. Мәйеткә һуңғы вазифаларыбыҙҙың береһе — йыназа намаҙын уҡыу. Йыназа намаҙы дүрт тәкбир менән аяғүрә уҡыла. Иң элек ниәт ҡылына. Унан һуң мулла, ҡулдарын күтәреп, беренсе тәкбирҙе әйтә һәм ҡулдарын кендек аҫтына ҡуя. Йәмәғәт та шуны эшләй.

1-се тәкбирҙә Сүбехәәнәкә доғаһы уҡыла. *Сүбехәәнәкәл-лааһүммә үә бихәмдикә үә тәбәәракәсмүкә үә тәғәләә жәддүкә үә ләә иләәһә ғайрук.* Был доғаны уҡып бөтөргәс, мулла, ҡулдарын күтәрмәйсә, «Аллаһүәкбәр» тип икенсе тәкбирҙе әйтә. Йәмәғәт тә, ҡулдарын күтәрмәйенсә эстән генә, икенсе тәкбирҙе әйтә.

2-се тәкбирҙә Салауат доғалары уҡыла. *Аллаһүммә салли ғәләә Мүхәммәдиү үә ғәләә әәли Мүхәммәде. Кәмәә салләйтә ғәләә Ибраһиимә үә ғәләә әәли Ибраһиимә иннәкә хәмиидүм мәжиидe. Аллааһүммә бәәрәк ғәләә Мүхаммәдиү үә ғәләә әәли Мүхәммәде. Кәмәә бәәрактә ғәләә Ибраһиимә үә ғәләә әәли Ибраһиимә иннәкә хәмиидүм мәжиидe.* Икенсе тәкбирҙән һуң, имам, ҡулдарын күтәрмәйенсә, 3-сө тәкбирҙе әйтә.

3-сө тәкбирҙә йыназа доғаһы уҡыла. *Аллааһүммәғ-фир лихәййинәә үә мәййитинәә үә шәәһидинәә үә ғаа ибинәә үә сағииринәә үә кәбииринәә үә зәкәринәә үә үнҫәәнәә. Аллааһүммә мән әхйәйтәһүү миннәә фә әхйиһии ғәләл-исләәм. Үә мәң тәүәффәйтәһүү миннәә фәтәүәффәһүү ғәлә!л-иимәән. Аллааһүммә иң кәәнә мүхсинәң фәзиде фии ихсәәниһии үә иң кәәнә мүсии әң фәтәжәәүәз ғәнһ.* Унан һуң 4-се тәкбир әйтелә.

4-се тәкбирҙән һуң бер ни уҡылмай. Уң яҡҡа ҡарап «*Әс-сәләәмү ғәләйкүм үә рахмәтүл-лааһ, һул яҡҡа ҡарап «Әс-сәләәмү ғәләйкүм үә, рахмәтүл-лааһ*»— тип сәләм бирелә. Шуның менән йыназа намаҙы тамам була.

Йыназа намаҙын шул рәүештә лә күрһәтеп була:

1-се тәкбир: Сүбеханәкә доғаһы

2-се тәкбир: Салауат доғалары.

3-сө тәкбир: Йыназа доғаһы.

4-се тәкбир; бер ни укылмайса, сәләм бирелә.

Йыназа намаҙы укылғас, йәмәғәттән: «Яҡшы кеше инеме?» — тип һорала. Йәмәғәт: «Яҡшы кеше ине. Аллаһының рәхмәтендә булһын», — тип яуап бирә. Шулай уның яҡшылығына таныҡлыҡ итәләр.

*Кәбер ҡаҙыу һәм мәйетте кәбергә төшөрөү тәртибе:*

- кәбер бер кеше оҙонлоғонда (буйы кәҙәр) тәрән иттереп ҡаҙыла, йәғни 160—180 см була;

- ҡибла яғынан ләхет алына. Комло һәм еүеш тупраҡтарҙа ләхет алынмаһа ла ярай;

- мәйеттең уң яғы бер аҙ ҡибла яғына әйләндерелеп ҡуйыла;

- мәйетте кәбергә яҡындары төшөрә. Төшөргәндә: «Бисмиллаһи үә ғәләә милләти расүүлилләәһ»,—тиҙәр;

- мәйет ятҡан кәбер өҫтөнә ултырыу, кәбер өҫтөнә баҫып йөрөү, кәбергә ҡаршы тороп намаҙ укыу тыйыла;

- кәбер юғалмаһын өсөн баш осона бер таш, йә бер такта ҡуйырға ярай. Әммә сығымы бик куп һәм күркәм кәберҙәр яһатыу дөрөҫ түгел.

*Мәйетте йыуыу тәртибе:*

Мәйет асылда бысраҡ түгел, әммә Аллаһы ҡаршыһына паҡ һәм тәһәрәтле барыуҙары өсөн йыуыу талап ителә. Мәйетте иң яҡындары йыуа. Яҡындарынан йыуыусылар булмаһа, ул ваҡыт был эште башҡа мосолмандар башҡара. Мәйет йыуыу һәм кәфенләү өсөн тәжрибә кәрәк. Майеттәрҙе йыуыу һәм кәфенләү кеүек һауаплы эштәрҙә ҡатнашҡан кеше, арабыҙҙан айырылып, мәңгелек йортона күскән дин ҡәрҙештәребеҙгә кешелек һәм мосолманлыҡ вазифаһын үтәгән була.

- мәйет тамбалға (мәйетте һалып йыуа торған ялғаш) арҡаһы менән яткырыла. Мөмкин булһа, бите һәм аяктары ҡиблаға табан йүнәлдерелә;

- мәйет йыуыла торған ергә йыуыусы һәм ярҙамсылар ғына инә ала. Табутка ҡуйған ваҡытта ярҙамсылар кәрәк булһа ғына индерәләр;

- мәйет йыуыусы тәһәрәтле булырға тейеш. Тәһәрәтһеҙ йәки айлыҡ күрем хәлендә мәйет йыуыу тыйыла;

- мәйет йыуғанда, кәрәкле һүҙҙәр генә һөйләнелә, юк-бар һүҙҙәр һөйләнелмәй;

*- мәйет йыуыусы ниәт ҡыла:*

– ниәт ҡылдым был мәйетте тәһәрәтләндерергә һәм ғосолландырырға;

- мәйетте йыуа башлағанда :«Бисмилләәһир-рахмәәнир~рахиим», тип башлана һәм бөткәнсегә кәҙәр «Ғуфранәкә йәә Рахмәән» доғаһы йыш-йыш укыла. Был доғаның мәғәнәһе: «Әй, Раббым мәғрифәтенде теләйем»;

- истинйә алдырыла. Йыуыусы, сепрәкте бармаҡтарына урап, мәйеткә истинйә алдыра. Был эш ике-өс мәртәбә кабатлана;

- мәйеттең ғәүрәт ерҙәрен йыуғанда ғәүрәт пәрҙәһе менән ябып торалар;

- тәһәрәт алдырғанда:

а/ ауыҙ-танау мәсех иттерелә, ауыҙ-танау эсенә һыу индерелмәй. Йыуыусы бер сепрәкте бармаҡтарына урап, еүешләтә. Был еүеш сепрәк менән мәйеттең ирендәрен һәм танау тишектәрен еүешләтәләр (мәсех иттереү);

б/ өс мәртәбә битен йыуа;

в/ иң элек өс мәртәбә уң ҡулын, шунан һул ҡулын йыуа;

г/ башҡа ағзалар ҙа мәсех иттерелә (муйын, ҡолаҡтар мәсех иттерелмәй);

д/ аяҡтар йыуыла (уң аяҡ, һул аяҡ – өс мәртәбә);

- тәһәрәттән һуң, мейетте ғосоллландырыу (кәүҙәне йыуыу) башлана:

мәйеттең сәстәре һәм башы өс мәртәбә йыуыла;

һул яҡҡа бороп, уң яғы өс мәртәбә йыуыла;

уң яҡҡа бороп һул яҡ өс мәртәбә йыуыла;

йыуып бөтөргәндән һуң мәйетте әҙ генә ултыртҡан кеүек торғоҙоп, ҡорһағын һыйпайҙар. Нәжес сыҡһа, нәжес йыуып ебәрелә. Мәйет яңынан йыуылмай;

мәйет йыуылғандан һуң, таҫтамал йә сепрәк менән киптерелә.

*Кәфенләндереү тәртибе*

Ирҙәрҙең кәфене өс өлөштән тора:

1) әхирәт күлдәге; 2) изар; 3) лифафа

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың кәфене биш өлөштән тора:

1 әхирәт күлдәге муйындан аяҡҡа тиклем. Мәйеттең сәстәре әхирәт күлдәгенең өҫтөнә һалына. 2. Баш яулығы; 3. Изар. 4. Күкрәк яулығы. 5. Лифафа.

- кәфенләгәндә лә мәйеттең ғәүрәт ерҙәренә ғәүрәт пәрҙәһе ябалар;

- баш яулығы; сәстәре ҡапларлыҡ ҙурлыҡта. Мәйеттең бите һәм сәстәре был яулыҡ менән ябыла;

- изар – баштан аяҡҡа ҡәҙәр йәймә;

- күкрәк яулығы: түштән кендеккә ҡәҙәр оҙонлоҡта. Күкрәк өҫтөнә ябыла;

- лифафа; изарҙан ярты метрға оҙонораҡ. Лифафа асылып китһә, , баштан һәм аяҡтан таҫма менән бәйләнә. Күмгәндә былар сиселә;

- иң элек лифафа, унын «өҫтөнә изар, унан әхирәт күлдәгенең яртыһы ҡуйыла. Мәйет әхирәт күлдәгенең өҫтөнә яткырылғандан һуң, ҡалған яртыһы ла мәйеттең өҫтөнә ябыла;

- баш яулығы менән мәйеттең битен һәм сәстәрен ябалар;

- изар менән кәүҙәһен урайҙар;

- күкрәк яулығын изарҙың өҫтөнә ҡуялар;

- лифафа менән мәйетте икенсе мәртәбә урайҙар.

*Һорау — яуаптар*

– Мәйетте йыуғанда нисә ярҙамсы кәрәк?

Мәйетте йыуғанда иң әҙе бер йыуыусы һәм бер ярҙамсы кәрәк, ләкин мәйеттең хәленә күрә (ҙур кешеме, баламы), берҙән артык ярҙамсы ла була ала.

– Мәйетте нимә менән йыуырға?

– Һабын менән йыуырға рөхсәт бар.

– Кәфенде алдан әҙерләп ҡуйырға яраймы?

– Вафат булмаҫтан әүәл кәфенде киҫеп, әҙерләп ҡуйыуҙың кәрәге юҡ. Ләкин, кәфенде өйҙә әҙер тоторға ярай. Бик теләгән кеше кәфенде әҙерләп ҡуя ала.

– Мәйет янына нимә ҡуйырға мөмкин?

– Йыуып кәфенләгән мәйеткә хушбуй еҫтәре һибергә рөхсәт бар, Кәфенлек эсенә көрьән бите, доғалар яҙылған биттәр (яуап нәмә) йә мәйеттең әйберҙәрен ҡуйыу ярамай.

– Кәфенлек купме кәрәк?

– Ирҙәргә һигеҙ метр; катын-ҡыҙҙарға ун метр кәрәк. Күберәк булһа ла зарары юк

– Ир ҡатынын, ҡатын ирен йыуамы ?

– Ғөмүмән, ир ирҙе, ҡатын ҡатынды йыуа. Әгәр йыуыусы булмаһа; катын ирен йыуа. Ләкин ир ҡатынын йыуа алмай. Ислам диненә күрә, ире вафат булған катын дүрт ай ун көн кейәүгә сыкмай көтөп тора. Быға «ғиддәт» тиелә. Был ғиддәттән һуң, ҡатын теләһә, кейәүгә сыға ала. Бының мәғәнәһе, ҡатындың ауырлы булыу-булмауын билгеләү. Йәғни, ире вафат булһа ла, дүрт ай ун көнгә ҡәҙәр ҡатын өсөн никахлылык хәле дауам итә. Шуның өсөн ҡатын ирен йыуа ала. Ирҙәр өсөн ғиддәт булмағанлыктан, катын үлеү менән ирҙең никахы боҙола. Шунлыктан ир ҡатынын йыуа алмай.

– Үле килеш тыуған бала йыуыламы?

– Үле килеш тыуған бала йыуылмай. Бер сепрәккә уралып күмелә.

– Мәйеттең тырнаҡтары һәм сәстәре киҫеләме?

– Юҡ киҫелмәй.

– Йыуыусылар мәйет тәнендә күргәндәрен һөйләй аламы?

– Йыуыусылар мәйеттә насар хәлдәр күрһәләр, быны бер кемгә лә һөйләмәҫкә тейештәр. Сөнки дин мәйеттәр хаҡында һәр ваҡыт яҡшы һүҙҙәр әйтергә ҡуша.

– Кәфен ниндәй төҫтә булырға тейеш?

– Кәфен аҡ төҫтә була. Ләкин – катын-ҡыҙҙар өсөн башҡа төҫтәрҙән дә булырға мөмкин.

***Зыярат ҡылғанда иҫкәрмәләр:***

- кәберҙәрҙе барып күреү кешеләргә үлемде хәтерләткәне өсөн дин тарафынан рөхсәт ителгән. Пәйғәмбәребеҙ бер хәҙисендә

«Ҡәберҙәрҙе барып күрегеҙ, сөнки ҡәбер һеҙгә үлемде хәтерләтер»,— тигән;

- ҡәберҙәрҙе барып күрер өсөн ҡапҡанан ингәндә, ҡәберлектә ятҡан барса ҡәбер әһелдәренә сәләм бирелә;

- ҡәберҙәр өҫтөндә булғанда, ясин сүрәһен уҡыу мотлаҡ. Пәйғәмбәребеҙ: «Бер кеше, ҡәберлеккә барып, ясин сүрәһен уҡыһа, Аллаһы Тәғәлә ул көндә унда ятҡан мәйеттәрҙең ҡәбер ғазабын еңеләйтер һәм уҡыусыға ла ул ҡәберлектә ятҡандарҙың һаны ҡәҙәр һауап бирер", – тигән.

Бынан башҡа өс мәртәбә Ихлас сүрәһе (Ҡулһүал-лаһ), бер Фатиха сүрәһе (Әлхәм) уҡыуҙың да һауабы бар. Хаҙрәти Әнәс әйтеүенсә, бер ваҡыт Пәйғәмбәребеҙҙән һорағандар: "Әй, Мөхәммәт, беҙ мәйеттәребеҙ өсөн саҙаҡа бирәбеҙ, хаж һәм доға ҡылабыҙ. Был яһаған изгелектәребеҙ уларға ирешәме икән?" Пәйғәмбәребеҙ: «Эйе, ирешә. Һеҙ үҙегеҙгә бер бүләк килгәндә, нисек шатланһағыҙ, улар ҙа һеҙҙең изгелектәрегеҙ менән шатланаларҙыр",— тип яуап биргән;

- ҡәберҙәрҙе барып күргәндә аяғүрә ҡыҫҡараҡ көрьән уҡыла, ә – ултырып оҙонораҡ уҡыла. Мөмкин булһа, ҡиблаға табан әйләнеп, мөмкин булмаһа — мәйеттең башы йәки аяҡ осонда тороп уҡыла;

- ҡәберҙәргә шәм яғыу, ҡәбер таштарын үбеү тыйыла.

*Мәйеткә файҙаһы булған нәмәләр*

- көрьән уҡып, һауабын мәйеттең рухына бағышлау.

- мәйет өсөн хәйер доға ҡылыу, Хәҙрәти Ибраһимдың доғаһын һәм белгән доғаларын уҡыу. Хәҙрәт Ибраһим ғөмүмән : «Эй, раббым үҙемде, ата-әсәмде һәм мөъминдәрҙе ҡийәмәт көнөндә ғәфү ҡыл» тигән. Пәйғәмбәребеҙ Хәҙрәти Мөхәммәттең иң күп ҡылған доғаларының береһе:: «Әй. Раббым, беҙгә донъяла яҡшылыҡ бир, Әхирәттә лә яҡшылыҡ һәм гүзәллек бир. Беҙҙе йәһәннәм ғазабынан һаҡла»;

- кешеләргә бурысы булһа, уны түләү;

- изге эштәр эшләп, һауабын мәйеттең рухына бағышлау. Мәйет күмелгәндән һуң, мәйет эйәләре, беренсе көндән башлап, етенсе көнгә ҡәҙәр ярлыларға саҙаҡа биреп, сауабын мәйеттең рухына бағышлау. Хәленән килмәгәндәр, ике рәкәғәт нәфел намаҙы уҡып, һауабын мәйеткә бағышлайҙар.

Ҡулланылған әҙәбиәт

Хисамитдинова Ф.Г. Мифологический словарь башкирского языка. Москва. Наука, 2010 г.

Сулейманова Л.Р. Погребально-поминальная лексика башкирского языка (Башкирско-русский словарь) Уфа "Гилем" 2005 г.

Башҡортса дини календарь 2011. Өфө, 2010 й.

Имам Ғәбдуррахмән Ҡайә Мәңгелек йортҡа табан. Ишембай 2005 й.

## Йөкмәткеһе

Ф.Г. Хисамитдинова (Уфа)
Традиционные свадебные обряды башкир .......................... 3

Ғ.Ғ. Кудрявая (Учалы)
Хәҙерге башкорт туйы сценарийы.......................................... 6

Ғ.Ғ. Кудрявая (Учалы)
Хәҙерге никах туйы сценарийы............................................11

Р.А. Султангареева (Уфа)
Башкирская городская свадьба...........................................18

Г.И. Гончарова (Магнитогорск)
Современная сельская свадьба...........................................22

Ф.Г. Хисамитдинова (Уфа)
Традиционные родинные обряды башкир.......................26

Р.Ә. Сөләйманова (Өфө)
Исем кушыу йолаһы...............................................................28

М. Ғәлләм (Өфө)
Сөннәт.........................................................................................35

Ф.Г. Хисамитдинова (Уфа)
Традиционные поминально-погребальные обряды
башкир .......................................................................................36

Р.Ә. Солтангәрәева, Ә. М. Сөләйманов (Өфө)
Ерләү йолалары .......................................................................37

Н.И. Әсәҙуллина (Өфө)
Күмеү йолаһы ...........................................................................44

Йөкмәткеһе ...............................................................................50

Семейно-бытовые обряды башкир

Подписано в печать 25.03.2011
Формат 60x84/16. Бумага офсетная.
Печать на ризографе.
Усл. печ. л. 3,02
ИИЯЛ УНЦ РАН
г.Уфа, пр. Октября, 71, тел.( 347)235-60-50

ИИЯЛ